**Йыһат Солтанов**

# Дәү Олояу — Ҡатай-көҙән башҡорттарының бөйөк дәүләте

## *1*

Донъя-ғаләмдең ҡоролош мифы буйынса, ҡитғабыҙҙың ҡап-яртышар икегә — Ҡуңыр-Буға юлы һыҙығынан төньяҡ-көнсығышҡа табан ***Тышҡы Башҡорт*** яғына һәм көньяҡ-көнбайышҡа табан ***Эске Башҡорт*** яғына бүленеүе билдәле. Дәү Хоҙайыбыҙҙың әмере менән Тышҡы Башҡорт — *Себер-абар, Ҡатай, Бәжәнәк* ҡәбиләләренең, ә Эске Башҡорт — *Үҫәргән-Ҡаңны, Ҡыпсаҡ, Башҡорт* ҡәбиләләренең (ә уларҙың һәр береһе бер нисә ырыуҙан тәшкил) тәүтөйәге булып торған[1]. Бында һүҙ барған Ҡатай-көҙән (сит тел әҙәбиәттәрендә ул «кидянь», «цидянь» тип яҙыла), тимәк, бар булмышы менән Тышҡы Башҡорт ҡәүеме һәм был — уларҙың тарихи-географик (һәм хәҙерге) урынлашыуы менән дә дәлилләнә. Үҙҙәрен *һыуәсә* тип атаған ҡытайҙар империяһы тарихнамәләрендә V быуаттан уҡ уларҙың яугир көндәштәре рәүешендә билдәле булған, ә X — XI быуаттарҙа хатта меңәрләгән йыллыҡ цивилизациялы һыуәсәнең (ҡытайҙың) үҙен буйһондороп, уның алтын тәхетенә үҙ кешеләрен императорҙар итеп ултыртҡан, шул арҡала һыуәсә империяһының һәм халҡының исемен дә ошоғаса донъяға билдәле Ҡатай (Ҡытай) итеп үҙгәрткән Ҡатай-көҙән бабаларыбыҙ хәҙерге Ҡатай башҡорттарының туп-тура бабалары булып тора.

## *2*

Иң боронғо ҡытайҙарҙың яҙма сығанаҡтарында Ҡатай-көҙәндәр хаҡында ҡыҫҡа-ҡыҫҡа, әммә ифрат мөһим мәғлүмәттәр бар. 551 — 554 йылдар арауығында яҙылған «Вэй-шу» тәүәрихендә: «Ҡатай-көҙәндәрҙең (кидандәрҙең) биләмәләре *көб-әсәләрҙән* (кумосиҙарҙан) көнсығышҡа табан урынлашҡан, көб-әсәләнр менән улар бер тамырҙан, тик айырым тармаҡтар ғына», — тип әйтелә.

«Кумоси» һүҙенең *көб-әсәй* (бүре-әсәй) икәнен иҫәпкә алһаҡ, изге бүре-әсәгә табыныусы Үҫәргән ҡәбиләһе тураһында бара һүҙ (тимәк, был ҡәбиләләрҙең икеһе *лә* башҡорттар). Үҫәргәндәрҙең Ҡатай-көҙәндәрҙән көнбайыштараҡ йәшәүҙәре *лә* әлегәсә дауамланмыш тарихи факт. Үҫәргән ҡәбиләһенән ҡыпсаҡ ырыуы саталанып (йәки шаталанып, Шата — Шато ырыу рәүешендә айырылып), үҙенең дөйөм ҡәбилә өсөн уртаҡ «көб-әсәк» — *ҡыпсаҡ* исемендә нығынған

[1] Ҡарағыҙ: Йыһат Солтанов. Хәтерхитап. Башҡорттарҙың яҙмышы һәм булмышы. Өфө — 2002; 234-енсе бит (һүрәт). Артабан «Хәтерхитап» тип күрһәтелә.

(ҡыпсаҡтарҙың ошоғаса изге ораны ла үҫәргәндәрҙеке менән бер, йәғни Үҫәргән батшалар шәжәрәһендәге атаҡлы Мүйтән-бейҙең атаһының исеме — «Туҡсаба» бит!..). Ә Ҡатай менән Ҡыпсаҡтың да бер тамыр (Ҡатайҡыпсаҡ) икәнлеге «Хәтерхитап»тың 231-енсе битендәге һүрәттән үк күренә.

Артабан «Вэй-шу»ҙа ҡәбиләнең 386 — 395 йылдар арауығында Ҡытайҙарҙың ғәскәрҙәренән ныҡ еңелеп, ике тарафҡа бүленеп ҡасыуы, шул арҡала кидандәрҙең кумосиҙарҙан айырымланыуы тураһында һүҙ бара. Бынының ла дөрөҫләнә «Хәтерхитап»тың баяғы 234-енсе битендәге һүрәттән: әүәлге берәгәй ҡәбилә Ҡатайҡыпсаҡ — айырым-айырым Ҡатайға (төньяҡ-көнсығыш) һәм Ҡыпсаҡҡа (көньяҡ-көнбайыш) үҙ алланған. Һәм һуңғыраҡ осор Ҡытай тәүәрихтәрендә лә Ҡатай-көҙәндәрҙең боронғо *«Әсән-би»* (бүре-әсәнән тыуған бей — үҫәргәндәр) ерендә йәшәгәнлеге, көнсығышта — Гаоли, көнбайышта — Үҫәргән-ҡыпсаҡ (кумоси), көньяҡта — ҡытайҙарҙың Инчжоу өлкәһе, төньяҡта — шивэй (башҡорт) ерҙәренә сиктәшлеге бәйән ҡылына. «Шивэй» — төньяҡ ҡәүемдәре тигән һүҙ, асылда улар *ете ырыулы башҡорт* булып, баяғы Ҡатай-көҙәндәргә, *биш ырыулы Үҫәргән-ҡыпсаҡтарға* бик яҡын ҡан-ҡәрҙәш икән. Ҡан-ҡәрҙәш Ҡатай-көҙән һәм Үҫәргән-ҡыпсаҡтарҙың бәжәнәктәр (сюнну-һун) менән бер тамырҙан икәнлеге лә мәғлүм ҡылына тәүәрихтә, бының да хаҡлылығын йәнә лә шул «Хәтерхитап»тың баяғы 234-енсе битендәге һүрәттән күрә алабыҙ.

Бына шул Ҡатай-көҙән башҡорттарының тарихи үҫеш юлындағы иң оло ҡаҙанышы — 907 — 1125 йылдар арауығындағы ҡеүәтле үҙ дәүләттәрен төҙөп сәскә атыуы, донъяға танылыуы. Абызый (император) төҙөгән ул шанлы илебеҙ тәүҙә Ҡатай-көҙәндәрҙең Сиҙәм (Цидань) дәүләте тип йөрөтөлһә, абызыйыбыҙ тирә-яҡ ҡәүемдәрҙе яулап алып буйһондорғас һәм биләмәләрен киңәйткәс, Олояу (*Ляу*) исемен ала; ә төньяҡ Ҡытайҙы ла теҙ сүктергәндән һуң Дәү Олояу (Дао *Ляо*) атала... Беҙ ул дәүләт тураһында башлыса Ҡытай императорының фарманы буйынса 1163 — 1189 йылдар арауығында император һарайының китапханасыһы, тарихсы-ғалим Е *Лун-ли*ҙың «Көҙәндәр дәүләте тарихы»нан (М., 1979) беләбеҙ.

### *3*

Башҡортта ошо көндәргәсә халыҡтың аҡыллы етәксеһен абызый, абыз тип йөрөтәләр (мәҫәлән, Килмәк-абыз — Килмәк Нурушев, Кинйә-абыз — Кинйә арыҫланов). Боронғо Ҡатай-көҙәндәр ҙә үҙҙәренең бөйөк дәүләтенә нигеҙ һалыусы беренсе императорҙы шулай атаған — Абызый[2] һәм был ләҡәп ҡытайҙар императорының Күк Улы тигән бөйөк ләҡәбенә тиң булған. 872 йылда донъяға килгән Абызыйҙың (императорҙың) ата-әсәһе ҡушҡан исеме билдәһеҙ, әммә атаһы — Ҡанлы, ә 7-нсе быуатта йәшәгән атаҡлы бабаһы иһә Йәләй исемле кенәздәр булған. «Кенәз» (Көн-әсә) — Үҫәргән батшалар титулы икәнлеген иҫәпкә алғанда, Абызыйҙың шәжәрә башы үҫәргәндәрҙән килгәнлеге аңлашыла, сөнки,

[2] Ҡытайҙар тәүәрихендәге ҡытайсалаштырылған рәсми әруахлыҡ исеме Тай-цзу. Ҡытайҙар бөтә төрки исемдәрҙе шулай ҡытайсаға «тәржемәләп» яҙғандар.

бик борондан уҡ ҡануни йола буйынса, бөтә башҡорттарҙың ырыу-ҡәбилә башлыҡтары (бейҙәр, кенәздәр, шамандар, хандар, ҡағандар) Үҫәргән батшалар шәжәрәһе инсандарынан ҡуйылыр булған. Ә Ҡытайҙар тәүәрихендә Абызыйҙың дөйөм иләүендәге (ила) ялан (елюй) ҡатайҙары ырыуынан тыуғанлығы мәғлүм.

Абызыйҙың донъяға мөғжизәле килеү легендаһы ла боронғо башҡорт мифтарына тартым: уның әсәһе, имеш, төшөндә күкрәгенә Көн-Ҡояш ҡапланыуын күргән һәм шунан буйға ҡалған. Балаһын тапҡан сағында ла тирә-яҡты мөғжизәле яҡтылыҡ балҡытып, тәмле-татлы хуш еҫтәре донъяны аңҡытҡан. Малайы иһә тыумыштан уҡ өс йәшлек бала дәүмәлендә булып, шунда уҡ үрмәләп тә киткән, өс айҙан уҡ тәпәй баҫҡан һәм бер йәшендә һөйләшә лә башлаған. Тиҫтерҙәренән айырмалы рәүештә, ифрат та киң күңелле, ҡыйыу, тәрән аҡыл эйәһе булып үҫкән ул. Мыҡты кәүҙәле, тәүәккәл, оҫта һәм тапҡыр яугир егет атта һыбай шәп елгән, атҡан уғы иле ҡалынлыҡ тимерҙе тишеп үткән. Егеттең император (абызый) буласағына ишаралап, ҡара төндәрҙең береһендә уның йоҡлаған тәңгәлен мөғжизәле яҡтылыҡ балҡытҡан, быға ил хайран ҡалған.

Ул осорҙа Ҡатай-көҙәндәр иле һигеҙ йәйләү-ҡорҙан торған, һәр йәйләү-ҡор менән *башҡор* (ҡорбашы) етәкселек иткән. Өс йыл һайын шул етәкселәрҙең береһен дөйөм һигеҙ ҡорҙоң башлығы — «*баш-ҡор-т*» (һуңғы «т» — күплек ялғауы, бөтәһе бергә «ҡорҙарҙың башы» тигән мәғәнәлә) итеп һайлағандар, бына шунан «*башҡорт*» этнонимы барлыҡҡа килә, буғай. 860 — 873 йылдар арауығында Сөйәр исемле кенәз-башҡорт тирә-яҡ ерҙәрҙе яулап, ил биләмәләрен киңәйтә башлай. Унан һуңғы кенәз-башҡорт Сөндәй иһә көньяҡтағы Ҡытай ерҙәренә лә йыш ябырыла.

Буласаҡ абызыйҙы дөйөм һигеҙ ҡорға кенәз-башҡорт итеп һайлағастары, ул уғата яугирлеген арттырып, көнбайыштағы ҡан-ҡәрҙәштәре яғына ғәййәр хәрби сәфәр ҡыла ла биш ырыулы Үҫәргән-ҡыпсаҡтарҙы (кумосиҙарҙы), ете ырыулы Бәжәнәк-башҡорттарҙы (шивэйҙарҙы) үҙ дәүләтенә ҡуша.

Көндәрҙән бер көндө уғата көнбайышҡараҡ ҡөҙрәтле хәрби сәфәрен ҡылып, хәҙерге Һарытау (Саратов) ерендәге һарыбаш бәжәнәк-башҡорттарҙы (желтоголовых шивэй) буйһондороп ҡайтып килгәнендә, ҡәҙимге ил сигендә уны ете йәйләү-ҡорҙоң кенәз-башҡорҙары абайлатмаҫтан ҡулға алып, хөкөм алдына ҡуйып, ата-бабанан килгән һайлау ҡанун-йолаһын үтәүҙе талап итәләр. Баҡты иһәң, был Ҡанлы улы Абызый, илдең төп ҡанунын боҙоп, туғыҙ йыл (өс һайлау осоро!) буйына өҙлөкһөҙ биләп ултырған байтәхетте, шуға күрә язаһын алырға тейеш. Кенәз-башҡортлоҡтоң атрибуты булған байраҡ менән барабанды хөкөмсөләренә тапшырып, Абызый үҙе яулап алған Ҡытай ерҙәрендәге Ҡытай-ҡалала (Ханьчэн), үҙенең йәйләү-ҡоро менән генә булһа ла, айырым һәм үҙ аллы йәшәргә рөхсәт ҡылыуҙарын үтенеп, ете кенәз-башҡорҙоң ризалығына ирешә. Ләкин шуның менән ете башҡор үҙҙәрен үлемгә дусар иткәнлектәрен һиҙмәй ҙә ҡала: байтәхеттән улар алып ташлаған уҙаманыбыҙ баяғы ҡытайҙар араһында артабан ифрат көсәйеп, ете кенәз-башҡорҙоң башына етә лә бөтә һигеҙ йәйләү-ҡорҙо яңынан үҙ ҡулы аҫтында берләштерә. Үҙе юҡта тарҡалған бәжәнәк-башҡорттарҙы, үҫәргән-ҡыпсаҡтарҙы ҡабат бер уҫҡа бөрөп, өҫтәүенә төньяҡтағы тунгустарҙы, көнбайыштағы башҡа төркиҙәрҙе яулап ала, бөтә тирә-яҡ

ҡəүемдəрҙе дер-ҡалтыратып тота Лəкин уҙамандың мөҡəддəс маҡсаты — ҡытайҙарҙың бөйөк Күк Улы һымаҡ уҡ абызый (император) булыу ине, ə бының өсөн шул сифатта уны көндəш Ҡытай императоры танырға, фатихаһын бирергə тейеш икəн...

Ул заманда Ҡатай-көҙəндəрҙəн көньяҡтараҡ бер-береһе менəн йəнтəслим алышыусы Тан һəм Лян исемле ике Ҡытай дəүлəте хакимлыҡ итə. Тан дəүлəтен Үҫəргəндең сатаһы (шатаһы) — Шато (Түңгəүер) ырыуының ҡытайса исемле Ли кэ-юн уҙаманы нигеҙлəгəн дə император булып менеп ултырған. Хəйлəкəр һəм тапҡыр Абызый уның менəн бер туғандар булышырға, Лян дəүлəтенə ҡаршы бергəлəшеп көрəшергə шартнамə төҙөшə. Лəкин аҙаҡ шул биргəн һүҙен боҙоп, баяғы Лян һарайы менəн яҡынлаша башлай. Шуныһын да əйтəйек: Абызый ҡытай телендə бик яҡшы һөйлəшкəн һəм яҙышҡан. Абызыйға илсе булып килгəн Ҡытай чиновнигы Яо Кунь шуны шаһитлай: «Ҡытайса яҡшы белгəн Абызый миңə əйтте: «Мин ҡытай телен белəм, лəкин бер ваҡытта ла ул телдə һөйлəшергə баҙнат итмəйем, сөнки халҡым миңə эйəреп ҡытайса һөйлəшə башлар, ə был хəл иһə яугирҙəремде бахырйəндəргə һəм əргендектəргə əйлəндерер, тип ҡурҡам». Йəғни Абызый туған халҡын ҡытайлашыуҙан ҡурсаларға, үҙ туған телен һəм мəҙəниəтен үҫтерергə тырышҡан. Əйткəндəй, уның менəн бер үк осорҙа йəшəгəн һəм ҡытайҙарҙың баяғы Тан дəүлəтендə императорҙар булып ултырған Түңгəүер (Шато) башҡорттары, затлы Ҡытай һарайҙарында ялтыр Ҡытай ебəгенə төрөнөп һəм тəмле-татлы Ҡытай тəғəмен ейеп, бисəлеккə Ҡытай ҡыҙҙарын алып, илле-алтмыш йыл эсендə туған телен дə, мəҙəниəтен дə онота — шау-ҡытайҙарға əүерелə...

Дөрөҫ, Ҡытай һарайҙары менəн сетерекле дипломатик уйындар ҙа уйнап ала уҙаман. Əйтəйек, баяғы Ҡытай дəүлəте Ляндан Гао Цин исемле илсе килгəс, Абызыйыбыҙ уның менəн бергə Ҡытай һарайына үҙенең майлыһын (мэйли) — ҡатыны яғынан яҡын туғаны Зəлəйҙе юлландыра. Үҙенең абызый (император) титулын дөрөҫлəттертеү өсөн ул уның аша ваҡытлыса түбəнселеккə лə бара: Ҡытай императорына яҙып ебəргəн хатында үҙен уның солтаны (вассалы) итеп таный ҙа үҙен тəхеткə күтəреүҙе үтенə. Лəкин был барып сыҡмағас, 916 йылда ул бөтəһен үҙе хəл ҡылып, Күктəге рухтар исеменəн үҙен үҙе император — Күктəн төшкəн Абызый итеп күтəрə. Селəү (Шулюй) ырыуынан булған хəлəл ефете лə "император ҡатыны Селəү" тип иғлан ҡылына, уға ла «императорҙың Ерҙəн күтəрелгəн ҡатыны» тигəн хөрмəтле титул бүлəк ителə. Ə дəүлəткə Сиҙəм (Цидань) исеме бирелə[3] — Ҡатай-көҙəндəрҙең шанлы императорҙар шəжəрəһе башлана. Император ҡатыны ла Абызыйҙың үҙенə тиң икəнлеген күрһəткес текстар бар.

### *4*

[3] Абызыйҙың улы Туған (Тай-цзун) император булып ултырыу дəүерендə был империя үҫешенең юғары сигенə етеп, Дəү Олояу дəүлəте тип нарыҡлана.

*Император Абызыйҙың ҡатыны Селәү[4] (Шулюй) ырыуынан сыҡҡан һәм көҙән ерҙәрендә тыуған көҙән ҡыҙы ине. Уның балалыҡ ысын исеме Йәлидә (Юэлидо). Алыҫ бабаһы Насир (Носы), сығышы буйынса уйғыр. Унан тыуған Вәйнин, унан тыуған Шансы (Шэньсы), унан тыуған Буға (Погу). Буға иһә кенәз Йондоҙсо (Юньдэцзя) ҡыҙына өйләнеп, уң тарафтағы оло йәйләүҙә йәшәгәнендә уларҙан буласаҡ император ҡатыны Йәлидә тыуған.*

*Император ҡатыны донъяның торошона ҡарап сығарған ҡарарҙарында ҡыйыулығы һәм һығылмалылығы менән айырылып торҙо. Абызыйҙың хәрби сәфәрҙәренә һәм халыҡ менән идара итеүенә ҡағылышлы ниәттәре тураһында фекер алышыуҙарҙа ҡатнашты һәр саҡ.*

*Бер мәл Абызый, Дансян ҡәбиләһенә ябырылыу өсөн, сүл аша сәфәр сыҡҡанында, ҡатынын йорт-ерҙе һаҡларға ҡалдырҙы. Ике шивэй ҡәбиләһе, Хуантоу һәм Сюбо, Абызыйҙың юҡлығынан файҙаланып, уның йортона ябырылмаҡҡа ғәскәрҙәрен берләштерҙе. Ошоно белгән император ҡатыны уларҙы ғәскәр башында тороп ҡыйыу ҡаршыланы. Дошманға ғәййәр ташланып, башкөлләй тар-мар итте. Шунан һуң император ҡатынының даны шаулатты бөтә тирә-яҡты.*

*Император ҡатынының әсәһе һәм ҡәйнәһе бар ине, бер саҡ улар, һике йөҙлөгөнә ултырып, уның баш эйеп сәләмләүен көттөләр. Әммә император ҡатыны әйтте: «Күккә генә баш эйәм мин, ләкин бәндәләргә баш эймәйем!».*

*Һуңғы Тан Ҡытай дәүләтенең беренсе императоры Ли Цунь-сюйҙың атаһы — Үҫәргән сатаһы (шато) йәғни түңгәүер башҡорто Ли Кә-юн (856 — 908) Ҡытай генерал-гөбөрнәтере вазифаһында Ҡыуанһыу (Хуанхэ) йылғаһының төньяғындағы ерҙәр менән идаралыҡ иткәнендә, ярҙам өмөт итеп, көҙәндәр менән дуҫлашты һәм Абызыйҙы — үҙенең ағаһы, уның ҡатынын үҙенең апаһы итеп таныны.*

*911 йылда үҙен Дәү Йән (Великое Янь) дәүләтенең императоры итеп иғлан ҡылған Лю Шоу-гуань бер заман барлыҡ көс-ҡеүәтен юғалтҡас, ярҙам һорап көҙәндәргә үҙенең хәрби кәңәшсеһе Хань Янь-хуэйҙы ебәрә. Абызый, үҙенә баш эйеп сәләм биреүҙән баш тартҡан Хань Янь-хуэйға асыуланып, уны ҡулға алғас һәм далаға ат көтөргә ебәргәс, императорҙың ҡатыны Абызыйға әйтә: «Хань Янь-хуэй үҙенең императорына тоғролоҡ бурысын тайпылышһыҙ үтәне. Заманабыҙҙың лайыҡлы кешеһе ул. Яраймы ни уны көтөүлектәр һәм ат һарайҙары менән мыҫҡылларға? Уны хөрмәтләп үҙебеҙгә хеҙмәткә саҡырырға кәрәк».*

*Абызый Хань Янь-хуэйҙы ҡайтарып ала, уның менән әңгәмәләшеп, уны яратып, үҙенең баш кәңәшсеһе яһай. Артабан Хань Янь-хуэй уның билдәле яранына әйләнә.*

*Көньяҡ Тан Ҡытай дәүләтенең императоры Ли Бянь ебәргән илселәр Абызыйға көслө дөрләп яна торған май килтереп тапшыра: «Әгәр ҡаланы штурмлағанда күҙәтсе башняларын ошо май менән яндырһаң, дошман утҡа һыу һипкән һайын ул уғата көслөрәк дөрләп янасаҡ», — тип белдерә улар. Шатланған Абызый шунда уҡ утыҙ мең һыбайлы һайлап алырға ла Ючжоуға һөжүм итергә ниәтләнә.*

*Император ҡатыны, көлөмһөрәп, былай ти: «Кем дә булһа майҙы һынап ҡарау өсөн генә башҡа дәүләткә һөжүм ҡылғанын ҡасан ишеткәнең бар?» Шунан һуң, тирмә алдындағы тирәккә күрһәтеп әйтә: «Ҡабыҡһыҙ ҡалып үҫә аламы был ағас?» — «Юҡ», — тип яуаплай Абызый. Шунан һуң император ҡатыны әйтә: «Ючжоу ҡалаһы ла ошо*

[4] Селәү-бей — Силәбе ерендә, тип аңларға кәрәк.

*тирәккә оҡшаш. Әгәр беҙ ҡала янына өс мең һыбайлы ҡуйһаҡ, улар тирә-яҡты талап коротһа һәм ҡаланы аҙыҡһыҙ ҡалдырһа, бер-ике йыл да үтмәҫ — үҙенән-үҙе бөләсәк ҡала. Ниңә улай ҡабалан һәм уйламай эш ҡылырға! Уңышһыҙлыҡҡа осраһаҡ, ҡытайҙар көләсәк бит беҙҙән, ә йәйләүҙәребеҙ беҙҙе ташлап китәсәк». Абызый үҙ ниәтенән төңөлә.*

*Император ҡатыны хәрби эштәрҙә лә маһиралыгын күрһәтә: килмешәк һәм Ҡытай яугирҙәре араһынан ул һайлап алып төҙөгән ике йөҙ меңлек гвардия шул тиклем дә яҡшы була ки, был гәскәрҙе, ҡиммәтле ынйы мәрйененә тиңләп, ынйы гәскәр, тип йөрөтәләр...*

*Абызыйҙың вафатынан һуң (926 йыл) уның ҡатыны, ире артынса уҡ гүргә кереү өсөн, бер нисә тапҡыр үҙенә ҡул һалырға итә, ләкин, улдарының әсенеп илауы арҡаһында, уң ҡулын ғына сабып өҙә лә шуны Абызыйҙың ләхетенә һала. Ошонан һуң һарайҙа ла, илдә лә «императорҙың ҡулы сабып өҙөлгән тол ҡатыны» тип атайҙар уны... Үрге баш ҡалала[5] иргә тогролоҡ ҡорамы ҡорола, сабып өҙөлгән ҡул манараһы суҡайтыла һәм ядкәр-һәйкәлташ ҡуйыла.*

*Әйтергә кәрәк, император ҡатыны, ҡулындағы хакимиәтте аҡыллы файҙаланып, император тәхетенә уртансы улы Туганды (Дә-гуанды) ултырта, уның заманында әсәне «императорҙың тол ҡатыны» тип йөрөтәләр.*

*Абызыйҙың вафатынан һуң императорҙың тол ҡатыны ошо Селәү, бөтә юлбашсыларҙың (ырыу бейҙәренең) ҡатындарын сәйгә саҡырып: «Бына мин тол ҡалдым, һеҙ ҙә минең һымаҡ булырға тейеш», — тип белдерә. Шунан һуң уларҙың ирҙәрен йыйып, каршыларында аягөҫтө баҫып тороп һорай: «Мәрхүм императорҙы һагындыгыҙмы?» Бөтәһе лә: «Нисек итеп һағынмаҫҡа, ти, инде — беҙ бит мәрхүм императорҙың игелектәрен күп күрҙек», — тип яуаплагас, император ҡатыны шунда уҡ: «Әгәр һагыныуыгыҙ хаҡ булһа, уның менән күрешергә китергә тейешһегеҙ», — тип белдерә лә бөтәһен дә үлтертә.*

*Әгәр ярандары араһында ҡаты бәгерле һәм мәкерле бәндәләр фашланһа, император ҡатыны уларға: «Ҡылыҡтарығыҙ тураһында минең исемдән мәрхүм императорға барып хисап бирегеҙ!» — тиер ҙә ҡәбер янына килтереп үлтертер ине. Төрлө осорҙа шулай үлтерелеүселәрҙең һаны йөҙәрләп иҫәпләнде. Ниһәйәт, Абызыйға баягыса сәләм алып китергә Пинчжоу өлкәһе уҙаманы Чжао Сы-вэнгә сират етте.*

*Әммә Чжоу Сы-вэндең һис кенә лә унда киткеһе килмәгәс, императорҙың тол ҡатыны былай ти: «Һин мәрхүм императорға хеҙмәт иттең һәм уның яҡыны инең. Шулай булгас, ниңә уның янына бармаҫҡа итәһең?» Чжао Сы-вэнь дә юғалып ҡалмай: «Әгәр яҡындары тураһында һүҙ барһа, уның һеҙҙән дә яҡынырағы юҡ ине. Әгәр башлап һеҙ китһәгеҙ, мин дә һеҙҙең арттан эйәрермен».*

*Императорҙың тол ҡатыны: «Мин императорға эйәреп ер аҫтына китеүҙән баш тартмайым, әммә уның артынса уҡ китә лә алмайым хәҙер, сөнки күрәм: балалар әле бәләкәй һәм дәүләт башлыгыбыҙ юҡ», — тип уфтана ла, баягыса, ҡулын сабып өҙөп, шуны ҡәбергә һала. Шулай итеп Чжао Сы-вэнь үлемдән ҡала...*

*Император ҡатыны ғүмеренең ахырында тәхет өсөн барган һарай ыҙгыштарында еңелеп, үҙенең ейәне — уйой тигән император тарафынан Маҙаһыу*

[5] Ҡатай-көҙәндәр империяһының тәүҙә — дүрт, аҙаҡ биш баш ҡалаһы була, быныһы — көнбайышта.

*йылғаһы буйына Абызый ҡәбере янына һөрөлә һәм шунда 953 йылда етмеш биш йәшендә вафат була...*

Ҡытай тәүәрихтәрендә яҙылған хикәйәт был.

Император ҡатынының тәржемәи хәле миҫалында башҡорт йәмғиәтендәге ҡатын-ҡыҙҙың тотҡан юғары урынын күрәбеҙ. С.И. Руденко үҙенең «Башкиры» (М. — Л., 1955; 268-енсе бит) монографияһында яҙғанынса, «башкирские женщины пользовались относительно большей свободой, чем у многих других мусульманских народов».

## 5

Ҡатай-көҙәндәрҙең Сиҙәм дәүләтенә император Абызый үҙе сәсеп киткән тос орлоҡтар уның яугир улы император Туған (Тай-цзун) заманында көр шытып һәм яҡшы уңыштар биреп, ҡытайҙарҙың цивилизацияһы менән ярышырлыҡ та алышырлыҡ һәм уларға үҙенең Ҡатай (Ҡытай) исемен беркетерлек Ҡатай цивилизацияһы барлыҡҡа килә, Абызыйҙан мираҫҡа ҡалған данлы Сиҙәм дәүләте аҙаҡ үҙенең бөйөк Дәү Олояу (Дао Ляо) исемен ала.

Әйткәндәй, Ҡатай-көҙән бабаларыбыҙҙың нисек итеп тәхеткә яңы император ултыртыу йолаһы ла бик ҡыҙыҡлы. Ҡытай тәүәрихселәре ошолай һүрәтләй уны:

*«Йоланы үтәмәккә бәхетле көн һайлап алына. Шул көн килерҙән элек үк, зал һәм ҡорбан салғыс төҙөлә. Ҡорбан салғыс түбәндәгесә ҡорола. Бейек итеп ҡоро сытыр өйөлә, уның өҫтөнә өс ҡат бүрәнә түшәлә, шулар өҫтөнә ҡорбан салғыс ҡуйыла. Былар бөтәһе йөҙ чи оҙонлоҡ кейеҙ менән көпләнеп, кейеҙ өҫтөнә аждаһалар һүрәтләнгән дүрткел мендәрҙәр һалына. Шулай уҡ императорҙың «икенсе тыуыу» йорто (әсәһенә арнала), императорҙы эҙләп табып «таныу» йорто төҙөлә.*

*Император «икенсе тыуыу» йортона керә һәм әсәһенән икенсе тапҡыр тыуыу йолаһын үтәй. Шунан һуң уны һигеҙ йәйләү-ҡор аҡһаҡалдары, алдынан, артынан һәм ике яғынан тотанаҡлап, залдың төньяҡ-көнсығышындағы*[6] *«тәхеткә күтәреү» мөйөшөнә оҙата Ҡояшҡа табынғас, император атҡа менә. Ат ҡараусылары итеп уның майлылары — ҡатыны яғы туғандары араһынан аҡһаҡалдар һайлап алына. Император атта елеп барғаны ыңғайында ергә ҡолап төшә*[7]*. Ат ҡараусылар һәм оҙатып барыусылар уға кейеҙ бөркәндертә.*

*Шунан һуң император убаға күтәрелә, ә юғары чиновниктар һәм төрлө ҡәбиләләрҙең башлыҡтары алыҫтан тороп уға баш эйәләр. Шунан һуң император атсапҡын аша хәбәр һала: «Элекке император Күккә ашты, ләкин олаталары һәм ағалары ҡалды, шулар араһынан лайыҡлыны һайларға кәрәк. Минең яҡшы яҡтарым юҡ, дәүләт менән идара итә аламмы ни мин?»*

---

[6] Тышҡы Башҡорт тарафы — ҡатай-көҙәндәр яғы.

[7] Күктән төшөүгә ишара.

*Чиновниктар яуаплай: «Беҙ мәрхүм императорҙың игелектәрен күп күрҙек, һеҙ гали янаптарҙың беҙгә мәртәбәле яҡшылыҡтары күп тейҙе, шуға күрә бөтәбеҙ ҙә бөтә йөрәктән һеҙгә хеҙмәт итергә теләйбеҙ. Нисек инде беҙ башҡа ниәттә булайыҡ!»*

*Император игланлай: «Әгәр ҙә мин һеҙҙең теләкте үтәһәм, бүләген дә, яҙаһын да гәҙел бирермен. Игелектәр эшләгәнегеҙҙә мин һеҙҙең чиндарығыҙҙы күтәрермен һәм вазифаларга тәғәйенләрмен. Енәйәттәр ҡылғанығыҙҙа мин һеҙҙе хеҙмәттәрегеҙҙән ҡыуырмын һәм үҙемдән ситләтермен. Әгәр әмерҙәремә буйһонар булһағыҙ, үтенесегеҙҙе уйлап ҡарарға тейешмен».*

*Бөтәһе лә яуаплай: «Беҙ император әмерҙәренә буйһонасаҡбыҙ». Ошонан һуң император үҙен «таныған» шул ерҙе билдәләргә тупраҡтан һәм таштан уба өйҙөртә. Шунан ул ҡайтып китә лә мәрхүм императорҙарҙың һүрәт-һындары алдында баш эйә һәм чиновниктарҙы туй табынына йыя.*

*Иртәгәһен император «тәхеткә күтәреү» залынан килеп сыға. Йәнүҙәктарының (телохранителдәренең) өлкән башлығы уға ҡорбан салғыс эргәһенә күтәрелергә ярҙамлаша. Аждаһа айбарлы дүрткел мендәрҙәргә бабалар рухтарының ете ҡорамдан килтерелгән табличкалары ҡуйыла. Чиновниктар төньяҡ һәм көньяҡ төбәктәрҙең канцлерҙары башлығында түңәрәккә теҙелеп, һәр береһе, кейеҙ ҡырыйын ҡалҡытып, тәбрик телмәре һөйләй. Шунан һуң «иң мөһим йәшерен эштәр» идаралығы башлығы уны тәхеткә күтәреү тураһындағы яҙыулы йәшмә табличка менән йәшмә мөһөр (мисәт) килтерә. Чиновник яҙыуҙы уҡып ишеттерә, шуның артынса «иң мөһим йәшерен эштәр» идаралығы башлығы хөрмәтле титул игланлай һәм императорға тапшыра шуны. Бөтә чиновниктар өс тапҡыр: «императорға ун мең йыллыҡ ғүмер!» — тип һөрәнләп баш эйә. Канцлерҙар, көньяҡ һәм төньяҡ идаралыҡтарҙың бөйөк кенәздәре һәм төрлө ҡәбиләләрҙең башлыҡтары бүләк итеп берәр көтөү ерән һәм аҡ һарыҡ тапшыра. Император кейем алмаштыра ла вафат булған императорҙарҙың һын-һүрәттәре алдында баш эйә. Шунан һуң, яңы императорҙың тәхеткә ултырыуын Күккә хәбәр итер өсөн, ҡорбан салғыслы сытыр өйөмөн ут төртөп яндыралар. Император чиновниктарҙы байрам табынына йыя, биләгән вазифа кимәлдәренә ҡарап һәр береһен бүләкләй»...*

Бынан тыш, мөсәл йыл әйләнеше буйынса һәр ун ике йыл һайын, император тыуған йылдан алдағы йылдың һуңғы ҡыш айында «икенсе тыуыу» йолаһы үткәрелә, шуның «императорҙы таныу» өлөшөнә күҙ һалайыҡ. Ван и тигән Ҡытай чиновнигы уны 1058 йылда үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтҡан.

*«Ун беренсе айҙың беренсе көнөндә император тәүҙә «тыйылған кесе төбәк»кә килде лә төнгөлөккә туҡталды. Иртәгәһен көҙән чиновниктары араһынан буй-һындары һәм ҡиәфәттәре тап императорҙыҡына оҡшаш туғыҙ кеше һайлап алынды. Һәр береһенә берәр кейем император хөлләһе биреп, кейенергә бойорҙолар. Туғыҙы ла император ҡиәфәтенә керҙе, был серҙе башҡаларға әйтеү тыйылды. Төн уртаһында улар ысын император менән бергә, бөтәһе ун кеше, «тыйылған кесе төбәк»тән китеп, «тыйылған оло төбәк»кә килде. Һәр береһе айырым тирмәгә керҙе, унда башҡа һис кем юҡ, фәҡәт балауыҙ шәм яна ла бер ултырғыс бар ине.*

*Өсөнсө көн иртән, сәғәт ете менән һигеҙ араһында, һәр тирмәгә берәр чиновник килеп, Күк Улын таныу йолаһын башҡарырға эскә уҙҙы. Императорҙы таныған уҙаманға мең баш һыйыр малы, мең баш һарыҡ, мең баш дөйә, мең баш йылҡы бүләк ителә. Был көндө бөйөк кенәз Сунго (императорҙың кесе ҡустыһы) һигеҙенсе тирмәлә таныны уны. Йолалары буйынса, император: «Мин император түгел», - тип әйтергә, ә бөйөк кенәз Сунго: «Һеҙ — император!» — тип ҡарыулашырға тейеш. Улар шулай бер-береһенә көҙән телендә өс тапҡыр әйттеләр, шунан һуң император: «Эйе, был тап шулай — мин», — тип килеште.*

*Император тирмәнән сығып, һандыҡтағы йола кейемдәрен кейенеп, түбәндәге тәртиптә сиратлап баш эйә башланы. Тәүҙә ул дүрт тапҡыр Көнгә (ҡояшҡа) баш эйҙе, шуның артынса — ете быуын бабаларының әруахтарына арналмыш табличкалар залына, мәрхүм императорҙарҙың рухын һаҡлаған тау эйәһенә. Шунан һуң тәхеткә күтәрелеүе тураһындағы табличканы алырға сытырҙан өйөлгән ҡорбан сағыс башына менде. Ошонан һуң, ҡотлауҙар ҡабул ҡылыр өсөн, Хэйлундянь залына керҙе. Дүртенсе көн йолалары ошонда тамамланды, император мәрхүм атаһының тол ҡатыны һәм бөйөк ике туған кесе ағаһы менән «тыйылған оло төбәк»тән сығып, «тыйылған кесе төбәк»кә килде, шунда иң яҡын көҙән һәм Ҡытай чиновниктары менән таңға тиклем кинәнеп байрам итте.*

*Дүртенсе көндә император ял итте. Бишенсе көндә ул Көньяҡ Ҡытай Сун императоры һарайынан бүләктәр ҡабул ҡылырға Сюэдинь ҡалаһына юлланды.*

*«Тыйылған оло төбәк»тән төньяҡ-көнсығыштараҡ «тыйылған кесе төбәк»тә егерме өс кейеҙ тирмә ҡоролған. Һәр ягы йөҙ ҙә ун бер аҙым оҙонлоҡ «тыйылған оло төбәк»тә ҡара кейеҙҙән ун тирмә һәм ете хәрби тирмә тора ине. «Тыйылган кесе» һәм «оло төбәк»тәрҙе һөңгөлө, мөслө, байраҡлы, барабанлы, ян һәм уҡлы ун меңлек көҙән ғәскәре уратып алған. Байраҡтарға көҙәнсә «ғәскәр» тамғаһы һалынған.*

*Ете быуын мәрхүм бабалар (әруахтар) исемлеге: Тай-цзу, Тай-цзун, Му-цзун, Цзин-цзун, Шэн-цзун һәм Син-цзун.*

*Ырыу инәһе һылыубикәнең рухы көҙән телендә оло йоҡ әсә (люегу аожо) исемләнә. Риүәйәттәр буйынса, иншань тауынан төшкән ете һыбайлы был һылыубикәне Ҡыуанһыу (Хуанхэ) йылғаһы уртаһынан тотоп алған[8]. Көҙәндәр — шул һылыубикәнең тоҡомдары. Уның һыны ағастан яһалып, сағыу төҫлө кейемдәргә төрөлгән. Ғәҙәттә ул Муешань тауындағы изге ҡорамда тора, ләкин һәр юлы император күтәреү йолаһына һынды изге ярлыҡаусы рәүешендә алып китәләр ҙә өсөнсө көнөндә ҡорамына кире илтеп ҡуялар.*

*Мәрхүм ете императорҙың мәрхүм туғандары — шулай уҡ ағастан яһалған, уҡалы ҡыҙыл кейемдәргә төрөлгән әҙәм һындары. Уларҙы ла Муешань тауындағы ҡорамдан килтерҙеләр.*

*Утыҙ ике чи бейеклегендәге ҡорбан салғыс ҡайырыһы һыҙырылмаған ҡарама ботаҡтарынан өйөлә, өҫтөнә ҡара лак менән ҡапланған өс ҡат бүрәнә теҙелә. Ҡорбан салғыс башына император тирмәһе ҡорола. Йоланы үткәреү көнөндә император шуның эсендә ултырҙы, ә түбәндә ике йөҙҙән ашыу көҙән чиновниктары баҫып торҙо»...*

---

[8] Үҫәргәндәрҙең башбабаны Һыуҙан тотоп алыу мифына бәйле.

## *6*

Алыҫ Көнсығыштағы Япон диңгеҙенән алып Көнбайыштағы Үҫәргән (Каспий) диңгеҙенәсә йәйрәп ятҡан дәү дәүләт менән идара итеү өсөн, башҡорттоң ҡәҙимге дүрт юлға бүленеш (ҡарағыҙ: Хәтерхитап, 285, 331-енсе биттәрҙәге һүрәттәр) тәғлимәт-миф йола-ҡануны буйынса, дүрт тарафта дүрт баш ҡала төҙөлә. Көнбайыштағы баш ҡала, Абызыйҙың үҙе тарафынан нигеҙләнеп, Абызый (император) баш ҡалаһы тип атала. Абызыйҙың вафатынан һуң тәхеткә ултырған уның уртансы улы Туған (әруахи *ләҡәбе* Тай-цзун) заманында яулап алынған Бохай иле төбәгендә бишенсе баш ҡала ҡорола. Шулай итеп, ҡытайҙар яҙыуынса, империяла «бөтәһе биш баш ҡала, алты урата (оҡруг), йөҙ илле алты өлкә, ике йөҙ туғыҙ өйәҙ, илле ике ҡәбилә һәм бойондороҡло алтмыш ил була. Биләмәләре көнсығышта — диңгеҙгәсә, көнбайышта — Цзиньшань тауҙарынаса һәм ҡомло сүлдәргәсә, төньяҡта — *Луцзюхе* йылғаһынаса, көньяҡта — Байгоу йылғаһынаса һуҙыла»...

Цзиньшань тауҙары тигәндәрен Урал тауҙары тип аңларға кәрәк.

Билдәле булыуынса, бөтөн башҡорт халҡын хәҙерге Башҡортостан Республикаһының символикаһындағы *ете ырыу* ғына түгел, ә теүәл төп *ун ике ырыу* тәшкил итә. Аныҡыраҡ әйткәндә, бөтөн башҡорт халҡы ике төп ҡәбиләгә бүленеп, Эске Башҡорт яғындағы Үҫәргән ҡәбиләһе — бәндәүи төп *биш ырыуҙан* һәм плюс Илаһи *ике* — бей-шамандар менән ҡаған-хандар — ырыуҙарынан торған, ә Тышҡы Башҡорт яғындағы Башҡорт ҡәбиләһе бәндәүи төп *ете ырыуҙан* хасил икән (ҡарағыҙ: Хәтерхитап, 331-енсе биттәге һүрәт һәм 448 — 450-нсе биттәр). Хәйер, быға инаныу өсөн, «Башкиры» (50-нсе бит) монографияһының мәшһүр авторы С.И. Руденконың һүҙҙәре лә етәлер: «В домонгольское время... башкиры разделялись на *двенадцать* основных родов, из которых *семь* были расположены на территории бывшей Уфимской провинции, а *пять* — в Зауральской ее части»...

Әле һүҙ барған бөйөк Ҡатай-көҙән империяһы бер быуат замана арауығында биләмәләрен уғата киңәйтә төшөп, бөтә башҡорт ҡәүемдәрен үҙ ҡанаты аҫтына ала, һөҙөмтәлә борондан килгән, әммә тарҡалып йәшәгән *ун ике* төп башҡорт ырыуын ҡабат бер төпкә берләштереүгә өлгәшә. Баштағы һигеҙ йәйләү-кор тәүҙә туғыҙ урҙаға үҙгәртелеп, тора-бара тағы ла өсәү өҫтәлеп, йәмғеһе түбәндәге *ун ике* урҙа хасил ҡылына (исемдәре Ҡытай тарихсылары яҙғанынса — ҡытайса):

1. Тай-цзу (Абызый) урҙаһы Суань — *Линьхуань* өлкәһендә, ә Абызый зираты Цзучжоуҙан көньяҡ-көнсығыштараҡ егерме *ли* алыҫлыҡта Урҙала һигеҙ мең төп йорт һәм ете мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ете меңлек атлы ғәскәр бирә. 5 өлкәгә, 1 өйәҙгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.
2. Тай-цзун (Туған) урҙаһы Гоанянь — Югухэ йылғаһына яҡын, ә император зираты Хуайчжоуҙан көньяҡтараҡ утыҙ *ли* алыҫлыҡта Урҙала өс мең төп йорт һәм ете мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Биш меңлек атлы ғәскәр бирә. 4 өлкәгә, 2 өйәҙгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

3. Ши-цзун урҙаһы Елувань — Тухэ йылғаһынан көнсығыштараҡ, ә зираты — Чаннин һарайынан төньяҡтараҡ. Урҙала биш мең төп йорт һәм һигеҙ мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Һигеҙ меңлек атлы ғәскәр бирә. 3 өлкәгә, 1 өйәҙгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

4. Императорҙың тол ҡатыны Ин-тянь урҙаһы Пусувань — Гаочжоу өлкәһендә, ә зираты — *Лунхуачжоуҙан йөҙ ли* көнсығыштараҡ. Урҙала ете мең төп йорт һәм алты мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Биш меңлек атлы ғәскәр бирә. 4 өлкәгә, 3 өйәҙгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

5. Му-цзун урҙаһы Долибэнь — Цзюяш тауынан көньяҡтараҡ, ә зираты — баш ҡаланан көньяҡтараҡ. Урҙала мең төп йорт һәм өс мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ике меңлек атлы ғәскәр бирә. 2 өлкәгә, 3 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

6. Цзин-цзун урҙаһы Цзяньму — Хэлухэ йылғаһы буйында, ә зираты — Цзучжоуҙан көньяҡтараҡ. Урҙала һигеҙ мең төп йорт һәм ун мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ун меңлек атлы ғәскәр бирә. 4 өлкәгә, 2 өйәҙгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

7. Императорҙың тол ҡатыны Чэн-тянь Урҙаһы Гувэнь — Тухэ йылғаһынан көнсығыштараҡ, ә ул үҙе император Цзин-цзундың зиратында ерләнгән. Урҙала алты мең төп йорт һәм ун мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ун меңлек атлы ғәскәр бирә. 4 өлкәгә, 1 өйәҙгә, 3 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

8. Шэн-цзун Урҙаһы Нюйгу — Нюйхуньхочжиҙа, ә зираты — Цинчжоу өлкәһендәге Наньанда. Урҙала ун мең төп йорт һәм егерме мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Биш меңлек атлы ғәскәр бирә. 5 өлкәгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

9. Син-цзун Урҙаһы Водувань — Гаочжоуҙан көнбайыштараҡ, ә зираты — үрге (көнбайыш) баш ҡала төбәгендәге Цинчжоу өлкәһендә. Урҙала ете мең төп йорт һәм ун мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ун меңлек атлы ғәскәр бирә. 3 өлкәгә, 4 хәрби идаралыҡҡа бүленә.

10. Дао-цзун Урҙаһы Асы — Хаошуйлэ күле буйында, ә зираты — үрге (көнбайыш) баш ҡала төбәгендәге Цинчжоу өлкәһендә. Урҙала ун мең төп йорт һәм егерме мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ун биш меңлек атлы ғәскәр бирә.

11. Император Тянь-цзо Урҙаһы Алувань — Чунь һәм Сюань өлкәләрендә. Урҙала һигеҙ мең төп йорт һәм ун мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. Ун меңлек атлы ғәскәр бирә.

12. Императорҙың бөйөк кесе ҡустыһы Сяо-вэнь Урҙаһы Чишидэбэнь — Цзянь, Шэн һәм Янь өлкәләрендә, ә зираты — Цзучжоуҙан утыҙ ли көньяҡ-көнбайышта Урҙала өс мең төп йорт һәм биш мең килмешәк төрлө ҡәүем һәм Ҡытай йорто иҫәпләнә. 3 өлкәгә, 1 хәрби идаралыҡҡа бүленә...

Ҡытай тәүәрихсеһенең иҫәпләп сығарыуынса, бөтәһе ике йөҙ өс мең йорт иҫәпләнеп, шуларҙың һикһән меңен — төп йорт халҡы (башҡорттар үҙҙәре), ә йөҙ егерме өс меңен — төрлө ҡәүем килмешәктәр һәм ҡытайҙар тәшкил итә.

Күренеүенсә, башҡорттарҙың Дәү Олояу дәүләте — күп этнослы (хәҙергесә әйткәндә, күп милләтле), ҡеүәтле империя булған. Еребеҙҙәге унан һуңғы империялар (Алтын Урҙа, Рәсәй, СССР) — шул боронғо күп этнослы дәүләтебеҙ традицияларын дауам иттереүсе улар. Шул уҡ ваҡытта әле генә килтерелгән статистик һандарҙың асылында Дәү Олояу империяһының оҙаҡламай буласаҡ һәләкәте — юҡҡа сығарылыуы үтәләй күренеп тора. Сөнки ундағы килмешәктәр һәм яулап алынмыш ҡытайҙар ғәмәлдә дәүләт нигеҙенә һалынған шартлатҡыс булып тора: империя ҡеүәтләнеп сәскә атҡанда улар уны яҡлашһа, ҡара көндәр килеү менән улар уның ҡан дошмандарына әүерелә лә ҡара золомон ҡыла — 1125 йылда бөйөк дәүләтебеҙҙең емерелеүенең төп сәбәбе ошолор.

## *7*

Баш ҡалалар темаһына әйләнеп ҡайтһаҡ, Абызыйҙың көнбайыштағы төп баш ҡалаһы (үҙе үлгәндән һуң уны үрге баш ҡала тип йөрөтәләр) унының тыуыпүҫкән ерендә урынлашып, Ҡытай үлсәүе менән йәмғеһе егерме *ли* майҙанды биләгән. Дошманға ҡоралдан атыу өңдәре, күҙәтеү башнялары булған бейек диуар менән уратылып, башҡорттоң дүрт тарафҡа дүрт юл йолаһынса, Көнсығыш һәм Көнбайыш, Көньяҡ һәм Төньяҡ ҡапҡалары асылып-ябылып торған. Был өлкә менән императорҙың иң яҡын туғандары — кенәздәр идара иткән.

926 йылда Абызый, көнсығыш сиктәге Бохай илен һуғышта еңеп һәм империяһына ҡушып ҡайтҡанынан һуң, төп баш ҡалаһын шаҡтай киңәйтеп, еңеүгә арналмыш яңы һарай һала һәм уның зиннәтле өс залын үҙенең ата-бабаларының һынлы һүрәттәре менән биҙәй. 1020 йылда баш ҡалаға илсе булып килгән Ҡытай чиновнигы Сун Шоуҙың яҙыуынса (бөтә атамалар Ҡытайсаға әйләндерелгән килеш бирелә), эске ҡаланың (кремлдең) көньяҡ-көнсығыш мөйөшөндә Атанһөйөнөсө (Тяньсюнсы) ҡорамын ҡороп, унда үҙенең атаҡлы атаһының һүрәтен яһатып ҡуя. Император ҡалаһы тип аталмыш кремлдән сығып көньяҡҡа һуҙылған урамдың буйында көнсығыш яҡлап император наместнигы, тоҙ һәм тимер идаралығы һәм Көньяҡ ҡапҡа янында аждаһа ҡорамы урынлашҡан. Урамдың осонда — Линьхуан уратаһы (оҡругы) һәм өйәҙе идаралыҡтары. Шунан көньяҡ-көнбайыштараҡ — Чунсяосы тигән Будда-хоҙай ҡорамы. Ҡорамдан көнбайыштараҡ — Чантай өйәҙе идаралығы һәм уғата көнбайыштараҡ — Тяньчангуань ҡорамы. Көньяҡ-көнбайышта тағы — һарай әһелдәренең балалары һәм кесе туғандары өсөн мәктәп, унан төньяҡтараҡ — Конфуций ҡорамы, унан көнсығыштараҡ — Будда ҡорамы Аньгосы. Был ҡорамдан көнсығыштараҡ — император ҡатынының элекке һарайы Цитянь, унан көнсығыштараҡ — императорҙың өлкән һөйәркәһенең һарайы, уны император ҡатыны Фа-тянь төҙөткән. Шунан көнсығыштараҡ — Будда ҡорамы Бэшжэнисы, ебәк туҡымалар туҡыу оҫтаханаһы, һарайҙар идаралығы, сүпрә идаралығы һәм дәүләткә иғәнә идаралығының иген һаҡлағыс ике элеваторы. Былар бөтәһе

император һарайынан көньяҡ-көнсығыштараҡ урынлашҡан. Һигеҙ һөнәр буйынса идаралыҡ иһә Будда ҡорамы Тяньсюнсы ҡаршыһында тора...

Ә Көньяҡ баш ҡала тураһында түбәнгеләр яҙылған: был баш ҡала Ҡытай-ҡала тип йөрөтөлә ине. Уның көньяҡ өлөшөн арҡыры киҫеп, ҡара-ҡаршы башнялар сыҡайтылған арҡыры урам үтә. Башнялар янында — баҙарҙар. Көнсығыш ҡапҡанан төньяҡтараҡ — *Лусянь* өйәҙе идараһы, ә унан көньяҡ-көнсығыштараҡ — Синжэнь өйәҙе идараһы.

Көньяҡ ҡапҡанан көнсығыштараҡ уйғыр биҫтәһе урынлашҡан, был биҫтә Абызый баш ҡалаһындағы уйғыр сауҙагәрҙәре тарафынан төҙөлгән, шунда килеп сауҙа итә улар. Көньяҡ-көнбайышта — Тунвэнь биҫтәһе, унда төрлө дәүләттәрҙең илселәре туҡтала. Был биҫтәнән көньяҡ-көнбайыштараҡ — *Линьхуан* биҫтәһе, унда Ся дәүләтенең илселәре ҡабул ҡылына. Унан көнбайыштараҡ — Будда ҡорамы Фусянсы. Ҡорамдан көнбайыштараҡ — Сюаньхуа өйәҙе идаралығы, ә көньяҡ-көнбайыштараҡ — Динба өйәҙе идаралығы. Шунан төньяҡтараҡ Баохэ өйәҙе идаралығы урынлашҡан. Көнбайыш ҡапҡанан төньяҡтараҡ — Ису өйәҙе идаралығы, унан көнсығыштараҡ — Циньляо өйәҙе идаралығы...

Ике ҡала миҫалында ғына ла күренеп тора: Дәү Олояу империяһы ҡитғабыҙҙа Ҡытай цивилизацияһы менән типә-тиң ярышырлыҡ цивилизацияға эйә булған. Империя киңлегендә бик күп ҡалалар, хәрби ҡәлғәләр, күперҙәр һәм юлдар һалына, ер эшкәртеү, ебәк ҡорто үрсетеү һәм ебәк туҡымалар туҡыу, һәр төрлө һөнәрселек, сауҙа эштәре сәскә ата. Тарих фәне, медицина, архитектура, сәнғәт, ә әҙәбиәттә проза һәм поэзия үҫешә. Ҡатай-көҙәндәрҙең ике төрлө яңы үҙ яҙмалары барлыҡҡа килә: 920 йылда — бер нисә мең иероглифлы «оло яҙыу», 924 йылда — еңелләштерелгән бер нисә йөҙ иероглифлы «кесе яҙыу». Һөҙөмтәлә оригиналь һәм тәржемә яҙма әҙәбиәт ныҡ үҫешеп, халыҡ араһында киң тарала, ағасҡа ырып (ксиллография) китап баҫыу эше юлға һалына. Ҡатай-көҙән шағирҙары, рәссамдары, артистары дан ҡаҙана тирә-яҡта. Абызыйҙың өлкән улы Туюй ҙа, ҡытайҙар яҙыуынса, шундай ижади һәләттәргә эйә булған. Һарай болалары ваҡытында ул карапҡа ултырып Ҡытайға ҡаса һәм, үҙе килеп туҡтаған диңгеҙ яры башына бағана-һәйкәл ултыртып, унда егерме иероглифтан хасил шиғырын яҙа (урыҫсанан минең тәржемәлә):

*Бәләкәй тау оло тауҙы ҡапланы,*
*Оло тау һис көс һәм сара тапманы.*
*Үҙ халҡына ҡарарға ул ояла,*
*Шуға күрә ҡасаҡтыр был донъяла...*

*«Ул китаптар уҡырға ярата, ә һунарға йөрөргә яратмай ине. Дундань (хәҙерге Корея) дәүләте менән идара иткәнендә ул, алтын ҡоймаҡтарын туплап, китаптар һатып алыу өсөн йәшерен рәүештә ючжоуға юллана. Бер нисә тиҫтә мең цзюанлек китаптарҙы арбаларға тейәп, иленә алып ҡайта. Цулюй тауында ул китапхана аса, ишегенең башына «Диңгеҙгә ҡарап һоҡланыу китапханаһы» тигән яҙыулы таҡта ҡуйҙырта»...*

Һәм йәнә 1031 йылғы йылъяҙмала император Тай-пин тураһында:

*«Император бигерәк тә «Чжэнь-гуандың идаралыҡ итеү осорондағы мөһим ваҡиғалар» китабын уҡырға яратты... Бынан тыш, император шәхсән үҙе Бо Цзюй-иҙың шиғырҙар китабын көҙән яҙыуында тәржемә ҡылды, көҙән чиновниктарын йыйыр ҙа шуны уҡып ишеттерер ине...*

*Император даосизм һәм буддизм асылын яҡшы аңланы, ә ун ике баҫҡыслы музыка гаммаһы ауаздары нигеҙҙәрен бигерәк тә тәрән үҙләштерҙе... Көҙән һәм Ҡытай чиновниктары менән табындаш булып хозурланғанында ул йә үҙе йырлар һәм бейер, йә үҙенең ҡатынына һәм һөйәркәләренә дүрт ҡыллы гитарала уйнарға ла ҡунаҡтарға шараплы туҫтаҡтар таратырға бойорор ине.*

*Император шулай уҡ шиғырҙар уҡырға ятатты. Ул канцлерҙарынан башлап бөтә чиновниктарына тема бирер ҙә шиғыр сығарырға бойорор ине. Шиғырҙар әҙер булғас, чиновниктар уларҙы императорға тапшырыр, ә ул шуларҙы бер-бер артлы уҡыр ине. Иң шәп шиғыр авторына алтын айыллы билбау бүләк итеlә. Император үҙе йөҙҙән артыҡ шиғыр яҙҙы»...*

Ә бына шул Ҡатай-көҙән башҡорттарының театры тураһында (1027 йыл):

*«Ҡышҡыһын ун икенсе айҙа Ҡытай Сун дәүләте чиновнигы, император китапханасыһы Кун Дао-фу, көҙәндәргә илсе булып килде. Артистар тамаша күрһәттеләр, Конфуцийҙы һынландырҙылар унда. Асыуына сыҙай алмаған Кун дао-фу тамаша залынан сығып китте. Илселәрҙе ҡабул ҡылыу буйынса көҙән чиновнигы Кун Дао-фуны урынына ҡайтарып, ғәфү үтенеүен талап итте... Кун Дао-фу: «Әле генә һөмһөҙ артистарығыҙ бөйөк аҡыл эйәһен рәнйетте, ләкин тыйманылар уларҙы», — тигәс, көҙән императоры, ҙур туҫтаҡҡа тултыра шарап ҡойоп, әйтте: «Көндәр һыуыҡ ваҡыт, эсегеҙ ошоно һәм һеҙ, бәлки, итәғәтлерәк булырһығыҙ»... Кун Дао-фу Конфуцийҙың ҡырҡ бишенсе быуын варисы ине»...*

Һәм тағы:

*«Император (Чжун-си, 1047 йыл) зауыҡлы рәссам ине һәм ул яҡшы картиналар яҙҙы. Бер ваҡыт ул үҙе һүрәтләгән ҡыр ҡаҙҙарын Ҡытай императоры һарайына бүләк итеп ебәрҙе. Ҡаҙҙар шундайын да оҫта һүрәтләнгәйне ки, тере һәм бына-бына осоп китерҙәр һымаҡ күренделәр»...*

991 йылдан башлап империялағы халыҡтарҙың йән иҫәбен алыу эше юлға һалына, бөтәһе дүрт миллион һигеҙ йөҙ мең кеше иҫәпләнеп, шуларҙың һигеҙ йөҙ меңен Ҡатай-көҙәндәр үҙҙәре тәшкил итә. Йылҡы малының иҫәбе бер миллионға барып етә, көтөү-көтөү мал-тыуарҙы сит илдәргә сығарып һаталар. Бик күп мәктәптәр, ә биш баш ҡалала юғары уҡыу йорттары гөрләп эшләй. Ханьмин академияһы иһә бөтә фәндәрҙең үҙәге булып тора.

11-енсе быуат Ҡатай-көҙән империяһы Көнсығыш Азиялағы иң ҡеүәтле держаўаға әүерелә, уның көслө армияһы һәм хәрби диңгеҙ флоты була. 10-ынсы

быуаттан уҡ Цзинь һәм Хань (Төньяҡ Ҡытай), Уюэ һәм Тан (Көньяҡ Ҡытай), Корйо (Корея) һәм Көнбайыш Ся (Тангут) дәүләттәре тулыһынса Ҡатай-көҙәндәргә буйһона һәм ҙур яҫаҡ түләп йәшәй. 947 йылда был шанлы бабаларыбыҙҙың ул саҡта Олояу исемләнмеш дәүләтенең императоры Хуэй-тун ҡытайҙарҙың Цзинь дәүләтен баҫып алып, бер үк ваҡытта үҙе Ҡытай императоры ла булып ултырғас, Ҡытай империяһы иҫәбенә киңәйтелгән дәүләтен Дәү Олояу тип атай һәм илдә дөйөм амнистия иғлан итә... Был көс-ҡеүәт беренсе сиратта, әлбиттә, өҫтәрәк әйтелеүенсә, Ҡатай-көҙәндәрҙең көслө армияһына һәм хәрби диңгеҙ флотына таяна. Һуғышта ҡайһындай ҙа батырлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ күрһәтеүҙәренең бер өлгөһө итеп, еңеүле һуғышты түгел, ә уларҙың 917 йылда Ҡытай ғәскәрҙәренән еңелеүҙәре ваҡытындағы бер хәрби хәрәкәтен алайыҡ (ҡытайсалаштырылған Тай-цзу исемен Абызый тип бирәбеҙ).

Ҡатай-көҙәндәр яғына ҡасып сыҡҡан Ҡытай генералы *Лу Вэнь-цзинь* Ҡатай-көҙән ғәскәре башында ҡытайҙарҙың Синьчжоу ҡалаһын баҫып алғас, Ҡытайҙың берләштерелгән ике армияһы Чжоу Дэ-вэй башлығында ҡалаға ябырыла. Һәм:

*«Ҡаланы штурмлау ун көн буйынса уңышһыҙ барҙы. Камалған ҡалаға ярҙамға өс йөҙ меңлек ғәскәр башында Абызый үҙе килде. Чжоу Дэ-вэй тулыһынса тар-мар ҡылынып, килгән яғына ҡасты.*

*Уңышын үҫтерә барып, Абызый алға үтте һәм, Ҡатай-көҙәндәр миллионлыҡ армия менән килә, бөтә тауҙар уларҙың тирмәләре һәм кибеттәре менән ҡапланған, тигән шомло хәбәрҙәр тарата барып, Ючжоу ҡалаһын ҡаманы.*

*Лу Вэнь-цзинь Абызыйҙы ҡаланы штурмлау өсөн ер аҫты юлдары һалырға өйрәтте, шуларҙы файҙаланып, көҙәндәр ҡалаға төрлө яҡтан көн-төн ябырылды. Ҡала һаҡсылары үҙ сиратында соҡорҙар ҡаҙып, көҙәндәрҙе тонсоҡтороу өсөн унда май яндырҙылар.*

*Бынан тыш, көҙәндәр, ҡәлғә диуарҙарына яҡынлау өсөн, тупраҡ убалары өйҙөләр, ә ҡәлғәне һаҡлаусылар уларҙың өҫтөнә иретелгән Тимер ҡойҙо. Көҙәндәр Көн һайын меңәрләп ҡырылыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡаланы штурмлау туҡталманы. Чжоу дэ-вэй ҡырҡыу хәл тураһында генерал-гөбөрнәтер Цзинь-ванга хәбәр менән атсапҡын юлландырҙы».*

Ҡалаға ярҙамға ҡытайҙарҙың йәнә ике ғәскәри төркөмө ебәрелә.

*«Көҙәндәр Ючжоуҙы инде ике йөҙ көнгә яҡын ҡамап торалар һәм ҡаланың хәле хөрт ине.*

*Ли Сы-юандең һәм башҡа хәрби башлыҡтарҙың бөтәһе етмеш меңлек яугирҙәре Ичжоу өйәҙендә берләштеләр. Ичжоуҙан улар төньяҡҡа хәрәкәтләнеп, Дафанлин артылышын үтеп, артабан көнсығышҡа табан тау тарлауыҡтары буйлап киттеләр һәм Ючжоуҙан алтмыш ли алыҫлыҡта Абызый армияһы менән осраштылар.*

*Абызый ғәскәрҙәре тау һырттары буйынса хәрәкәт итте, ә Ҡытай ғәскәрҙәре — аҫта, тарлауыҡтар буйлап. Улар тарлауыҡ ауыҙына тиңәлгәс, абызый ун меңдән артыҡ һыбайлылары менән уларҙың юлын бүлде. Ҡытай ғәскәрҙәре ҡурҡыуға төштө. Шул саҡ*

*Ли Сы-юань йөҙҙән артыҡ һыбайлылары башында алға ташланды. Башынан шлемын һалып һәм ҡамсыһын ажарлы айҡап, ул көҙәндәр теләндә һөрәнләне: «Һеҙ сәбәпһеҙҙән беҙҙең сиктәрҙе боҙҙоғоҙ, шуға күрә Цзинь-ван миңә миллионлыҡ ғәскәребеҙ башында тура көнбайыш баш ҡалағыҙға дөрөргә һәм тоҡомоғоҙҙо ҡоротторға бойорҙо». Шуның артынса ул атын ҡыҙыулатып һәм ҡамсыһын айҡап, көҙәндәр теҙмәһенә өс тапҡыр ташланды, башлыҡтарының береһенең башына етте. Яугирҙәре уның артынан берҙәм алға ябырылып, һөҙөмтәлә Абызый ғәскәрҙәре сигенде, ә Ҡытай ғәскәрҙәре тау араһынан сыға алды.*

*Ли Цунь-шэнь йәйәүлеләренә ағас ҡырҡырға һәм саталы һөңгөләр тырпайтырға бойорҙо. Һәр яугирҙең ҡулында һөңгө булып, тере ҡойма барлыҡҡа килде. Абызый атлылары ҡойма тирәләй тапанды, ҡойма артынан уларға бөтә булған атҡыстарҙан уҡ яуҙырҙылар. Уҡтар шул тиклем дә күп осто ки, ҡояшты ҡапланы улар, ә үлтерелгән һәм яраланған көҙәндәрҙең, уларҙың аттарының кәүҙәләре менән юлдар быуылды.*

*Ҡытай ғәскәрҙәре Ючжоуҙың үҙенәсә, тип әйтерлек, килеп еткәс, Абызый дошманын ҡаршыларға әҙерләне ғәскәрҙәрен.*

*Ли Цунь-шэнь үҙенең йәйәүлеләренә көҙәндәрҙең тылына керергә бойорҙо, ә әргендек һалдаттарына, сытыр-сатыр йыйнап, фронт буйынса үләнде яндырырға ҡушты. Төтөн һәм туҙан күккә олғашты. Һөрәнләп тә барабандар ҡағып ике яҡ төкәлеште, артынса уҡ көҙәндәр тылындағы йәйәүлеләр һуғышҡа кереште.*

*Абызый ныҡ еңелде һәм, ғәскәрҙәрен туплап, ылауҙарын, тирмәләрен, монаяттарын, ҡоралдарын һәм күп һанлы һарыҡтарын, аттарын ташлап ҡалдырып, Бэйшань тауҙарын артылып ҡайтып китте. Ҡытай ғәскәрҙәре Ючжоуға керҙе»...*

## *8*

Ләкин Көнсығыш Азияла барыбер Ҡатай-көҙәндәр өҫтөнлөк итә, шунһыҙ улар дәүҙәрҙән дәү ярты ҡитғаны — Япон диңгеҙенән алып Төркөстан ҡом сүлдәренәсә, Һары диңгеҙҙән алып Байҡал күленәсә арауыҡты ҡулдарында тота алмаҫтар ине. Үҙҙәрен бөтә донъяның бойороусылары иҫәпләгән Ҡытай императорҙары ла уларҙың еңеүле аҙымдары алдында йыш ҡына теҙ сүгер булған.

Ҡатай-көҙәндәрҙең хәрби ҡоролошо, хәрби сәфәрҙәре һәм һуғыш алымдары «Ляо-ши» тәүәрихендә ентекле бирелгән һәм ул башҡорт яугирлегенең аҫыл сәхифәһен тәшкил итә, беҙ уны белергә бурыслы.

*«Олояу дәүләтенең хәрби ҡоролошо буйынса, —* тип яҙа ҡытайлылар, *— халыҡтың ун биш йәштән алып иллегәсә бөтә ир-аты хәрби исемлектәргә теркәлгән. Регуляр ғәскәрҙең һәр бер яугиренә өс ат, бер фуражир һәм лағырҙы хеҙмәтләндереүсе бер кеше тәғәйенләнә.*

*Һәр яугирҙә туғыҙ әйберҙән торған монаят бар: тимер кейем, сепрәк септә, йүгән, атының көсөнә күрә уға тимер йәки күн көп, дүрт ян, дүрт йөҙ дана уҡ, оҙон һәм ҡыҫҡа һөңгө, гудо, балта, алебарда, ҙур булмаған флаг, сүкеш, беҙ, бысаҡ, ут саҡма, ат әләгәне, бер доу ҡоро аҙыҡ, ҡоро аҙыҡ өсөн тоҡ, ырғаҡ, кейеҙ сатыр һәм йылҡы ҡороҡларға ике йөҙ чи оҙонлоҡ арҡан. Быларҙың бөтәһен яугир үҙе әҙерләй.*

*Яугирҙәр һәм аттар ҡаҙнанан ашлыҡ һәм һалам менән тәьмин ителмәй. Бының өсөн көн дә бөтә тарафтарға фуражирҙар ебәрелеп, кәрәкле аҙыҡ-түлекте талап алып килтерәләр...*

*Һуғыш хәрәкәттәре башлау тураһында император үҙенең көҙән һәм Ҡытай ярандары менән бергә Күк, Ер һәм Көн (ҡояш) рухтарына хәбәр еткерә һәм һоро үгеҙ менән аҡ атты ҡорбанға сала. Ә Айға табынмайҙар*[9]*. Яҡын ярандарына император һуғыш башланыу тураһында мәрхүм Абызыйҙан башлап мәрхүм императорҙарҙың бөтәһенә уларҙың зираты янында, һәм шулай уҡ Муешань тауы эйәләренә хәбәр еткерергә бойора.*

*Шунан һуң император яугирҙәрҙе хеҙмәткә саҡырыу тураһында бөтә төбәктәргә указын иғлан ҡыла. Әммә көньяҡ һәм төньяҡ кенәздәре, Си ҡәбиләһе кенәзе, көнсығыш баш ҡалалағы Бохай ғәскәрҙәре һәм Яньцзин баш ҡалаһына бойондороҡло ғәскәрҙәр, император указына ла ҡарамаҫтан, һуғыш сәфәренә шунда уҡ ҡуҙғалырға баҙнат итмәйҙәр. Сөнки, дөрөҫләтеп, мотлаҡ императорҙың үҙенә мөрәжәғәт ҡылырға тейеш улар. Император уларға яуап менән өлкән хәрби башлыҡтарын юлландыра, улар килтергән балыҡ ҡиәфәтендәге алтын биркә яртыһына тегеләрҙәге шундай уҡ ярты алтын бирканә тап килтереп ҡарайҙар, улар тоташһа ғына ғәскәрҙәр хәрәкәт башлай.*

*Яугирҙәрҙе хеҙмәткә саҡырыу тураһындағы император указын алыу менән үк, хәрби хеҙмәткә алынырға тейешлеләр йыйыла, уларҙың ғаиләләренең матди хәле тикшерелеп иҫәпләнә, исемлектәр барлана һәм ғәскәр, тәртипкә килтерелеп, артабанғы бойороҡтарҙы көтә.*

*Унбаштарынан башлап бөтә командирҙар үҙ вазифаларына бәйле тәртиптә ғәскәрҙәрҙе барлап тикшерә лә үҙ командирҙарынан ҡорал һәм биркалар ала. Император вәкилдәренең быға ҡыҫылырға хаҡы юҡ. Ғәскәрҙәрҙе дөйөм тикшереү тамамланғас, императорға йәнә хисап бирелә. Яугирҙәрҙең һанына ҡарап император үҙенең вәкилдәрен ғәскәр башлыҡтары итеп билдәләй, улар һәм урындағы командирҙар бер-береһен контроль аҫтында тота Улар йәнә биш йүнәлеш*[10] *байрағына һәм барабанына рөхсәт һорай.*

*Ошонан һуң император шәхсән үҙе хәрби башлыҡтарҙы һәм командирҙарҙы тикшерә, лайыҡлы ағай-энеләре һәм юғарылыҡлы ярандары араһынан сәфәр ғәскәрҙәренең баш сәрдарын, баш сәрдар ярҙамсыһы һәм баш инспектор вазифаларына лайыҡлыларҙы һайлап ала. Ул шулай уҡ бөтә ғәскәрҙәрҙән үҙенең гвардияһына утыҙ мең иң яҡшы яугирҙе, алғасҡыға өс мең тапҡырйәнде һәм алыҫтан темеҫкенеү өсөн темеҫкен әтрәттәренә йөҙҙән артыҡ сая йәнде һайлап ала. Был әтрәттәрҙең һәр береһенең үҙ командиры була. Быларҙан тыш, армияның бөтә әтрәттәре, һандарына ярашлы, биштән алып унғаса кеше бүлә, улар айырым командир башлығындағы әтрәткә берләшеп, ғәскәрҙәрҙе саҡырыу һәм бойороҡтар илтеү өсөн элемтәселәр рәүешендә файҙаланыла. Иген баҫыуҙары тапалмаһын өсөн, ғәскәрҙәргә йылдамыраҡ хәрәкәтләнергә ҡушып, император төрлө тарафтарға атсапҡындар ебәрә. Хәрби сәфәргә сығыу — туғыҙынсы айҙан да һуңламай, ә хәрби сәфәрҙән ҡайтыу — ун икенсе айҙан да һуңламай*

---

[9]Көнгә (Шүлгән батырға) табынып, Айға (Урал батырға) табынмауҙары ҡатай-көҙәндәрҙең борон Үҫәргән ҡәбиләһенә ҡарауҙарына ишара.

[10] Биш баш ҡаланың берәгәйлегенә ишара.

*үтәлеүе фарыз. Ғәскәрҙәр хәрәкәт иткән юлдарҙа Буддасы монахтың, монашканың йәки матәм кейемле әҙәмдәрҙең тап булыуы яман билдә һанала.*

*Император шәхсән үҙе хәрби сәфәрҙә ҡатнашҡанында илдәге мөһим хәрби һәм дәүләт эштәре менән ваҡытлыса идара итергә император нәҫеленән берәй кенәзде тәғәйенләп ҡалдыра.*

*Ҡытай территорияһына дөрөп кергәс, гәскәрҙәр өскә бүленә лә айырым өс юлдан хәрәкәтләнә. Император һәр саҡ урталағы юлдан бара, ә гәскәрҙәр баш сәрдары һәм император гвардияһы башҡа йүнәлештәрҙән китә. Ғәскәрҙәр юлында өйәҙ ҡалаһы йәки ҙур ҡасаба осраһа, шунда уҡ баҫып алына. Ә инде был эре өлкә ҡалаһы йәки хәрби оҡруг үҙәге булһа, тәүҙә дошман һаҡланыуының көслө һәм йомшаҡ урындарын һәм ябырылыу мөмкинлектәрен асыҡлайҙар, шунан һуң штурмлайҙар. Юл буйындағы йорттар, баҡсалар, тут ағастары һәм көҙрәнлектәр мотлаҡ юҡ ителә һәм яндырыла.*

*Ҡытайҙың Сун династияһының төньяҡ баш ҡалаһына яҡынлағас, өс йүнәлештән килгән гәскәрҙәр, сапҡын яһау мәсьәләләрен тикшереү өсөн, бергә ҡушыла. Сигенгәндә лә тап шулай итәләр.*

*Өс йүнәлештә хәрәкәтләнеүсе гәскәрҙәрҙең алдында, артында, уңда һәм һулда дозор этрәттәре бара. Дозор этрәттәренең алдында, артында егерме лиҙан артығыраҡ алыҫлыҡта алыҫтан темеҫкенеү этрәттәре бара, һәр этрәттә ундан артығыраҡ кеше. Был этрәттәрҙең бөтә яугирҙәре тимер кейемле. Төндә, биш йәки ун ли һайын туҡтап, аттарынан төшәләр ҙә ергә ятып тирә-яҡты тыңлайҙар: кеше тауышы, ат бышҡырыуы ишетелмәҫме? Әгәр ишетелһә, кешеләрҙе һәм аттарҙы эләктерәләр. Үҙ көстәре етмәһә, дошман хаҡында ашығыс рәүештә алғаҫҡы этрәткә хәбәр итәләр һәм бергәләп ябырылалар. Әгәр эре этрәт осраһа, кисекмәҫтән гәскәрҙәр сәрдарына хәбәр итәләр. Шул рәүешле, дошмандың ғәмәли көстәре һәм уның ҡылыҡтары хаҡында белеп торалар һәр саҡ.*

*Әгәр юлда торған өлкә ҡалаларын ныҡ һаҡлаһалар һәм уларға ябырылып булмаһа, гәскәр уларҙы әйләнеп уҙа. Дошмандың ҡаланан сығыу һәм юлды бүлеү ҡурҡынысы тыуһа, ҡаланы ҡамап, уҡтар атып һәм барабандар ҡағып, ялған ябырылыу менән алдайҙар дошманды. Дошман ҡапҡаларын ябып, һаҡланыу сараһын күргәс һәм юлда ҡаршылыҡ ҡалмағас, артабан китә гәскәр.*

*Дошманға көтмәгәндә һөжүм итеү һәм коммуникацияларын боҙоу, өлкә ҡалалары араһындағы элемтәне өҙөү һәм уларҙы бер-береһенән айырып, ярҙамлыҡһыҙ ҡалдырыу өсөн махсус гәскәрҙәр тәғәйенләнә. Дошман гәскәрҙәре көтмәгәндә төндә ҡәлғәләренән сығып ябырылмаһын, йәки күрше ҡалаларҙың гәскәрҙәре менән берләшмәһен өсөн, ҡараңғы төшөү менән үк һәр ҡала эргәһендә ҡала ҡапҡаларынан йөҙ аҙымдай уңда һәм һулда тимер кейемле, ҡоралды йөҙ һыбайлыны һаҡҡа ҡуялар. Әгәр дошман сыҡһа һәм уны юҡ итергә этрәттең үҙ көсө етмәһә, кире елдерәләр ҙә, гәскәр йыйып, һуғыша башлайҙар. Шулай уҡ төндә яҡындағы ҙур юлдарға, һуҡмаҡтарға, тау юлдарына һәм йылға кисеүҙәренә лә яугирҙәр ебәрелә.*

*Бөтә фуражирҙар тимер кейемле һәм ҡоралды. Фуражирҙар төркөмдәренән этрәттәр төҙөлә. Улар һәр саҡ баҡсаларҙы һәм ағастарҙы киҫә, шунан һуң ҡулға төшкән ҡарт-ҡороно һәм бала-сағаны ҡыуып килтереп, уларҙан тупраҡ һәм ағас ташытып, ҡала диуарҙары буйындағы урҙарҙы, канауҙарҙы күмдертә. Ҡалаларҙы штурмлағанда һәр саҡ уларҙы ҡәлғәләргә башлап менергә мәжбүр ҡылалар, шуға күрә*

*ҡаланы һаҡлаусыларҙың үрҙән яуҙырған уҡтары, таштары һәм ағастары фәҡәт шул ҡарт-короларға ла бала-сағаларға зыян килтерә.*

*Былырҙан тыш, ғәскәрҙәр артында Олояу дәүләтенең өлкәләрендә һәм өйәҙҙәрендә йәшәүсе ҡытайҙарҙан алынған ун меңлек төркөм килә, уларҙың бурысы — ағас ҡырҡыу һәм юлдарҙы тигеҙләү.*

*Император туҡталған урын һәм хәрби лағырҙарҙың уратма ҡоймаһы фәҡәт тут, көҙрән, слива һәм каштан ағастарынан ҡорола. Ғәскәр киткән саҡта ағастар яндырыла.*

*Әгәр дошман ғәскәренең һуғышҡа әҙерләнеүе беленһә, уларҙың позицияһы, ҙур һәм бәләкәй тауҙарҙың һәм йылғаларҙың урынлашыуы, һөжүм итеү һәм сигенеү юлдары, ярҙам көстәр күсереү өсөн иң ҡыҫҡа юлдары, аҙыҡ-түлек ташыу урындары иҫәпкә алына ла уларға контроллек ҡылыу саралары билдәләнә. Шунан һуң һәр яҡтан дошман позицияһын уратып һыбайлыларҙан биш йөҙ, ете йөҙ кешелек отрядтар ҡуйыла, һәр отрядтың үҙ командиры була.*

*Тәүҙә бер отряд, аттарҙа сабып, көслө һөрәнләүҙәр менән дошман позицияһына ябырыла. Уңышлы сыҡһа, бөтә отрядтар ҙа һөжүмгә күсә. Уңышһыҙ осраҡта беренсе отряд артҡа күсерелеп, урынын икенсеһе ала. Сигенеүселәр аттарына ял бирә, ә үҙҙәре һыуға манып ҡоро аҙыҡ ашай. Әгәр дошман позицияһында ныҡ торһа, ныҡышмалы һуғышты һуҙмай, ике-өс көн уҙымында дошман яҡтың арыуын көтә.*

*Былдай саҡта фуражирҙарға атҡа тағылған ике оло һеперткене һөйрәлтеп ел үренән йән-фарман сабырға — дошман позицияларын саң бураны менән ҡаплатырға бойорола. Фуражирҙар сиратлашып бер алға, бер артҡа саба, һөҙөмтәлә күҙ асҡыһыҙ саң бураны эсендә ҡалған һәм тамам асыҡҡан, арыған дошман хатта бер-береһен күрә алмай башлай һәм был еңеүгә килтерә.*

*Әгәр дошмандың көньяҡ флангыһында уңышҡа ирешелһә, ә төньяҡ флангыһында уңышһыҙлыҡ кисерергә тура килһә, өҫтәүенә урталағы баш сәрдар һис кенә лә был хаҡта белә алмаһа, үҙҙәренең хәле тураһында бер-береһенә хәбәр итеү өсөн ауаз-сигналдар сифатында үҙҙәренең иленең төрлө өлөштәрендәге тауҙарҙың һәм йылғаларҙың исемдәре файҙаланыла.*

*Император шәхсән үҙе сәфәрҙә ҡатнашмаһа, сәфәрҙе йөҙ илле меңдән дә кәм булмаған яугирле эре яран етәкләй, шул уҡ ваҡытта ябырылыу һәм ҡайтыу ҙа, баяғылай, өс юлдан башҡарыла ла ғәскәрҙәр ҡытайҙарҙың Сун династияһының төньяҡ баш ҡалаһы янында берләштерелә. Һуғыш хәрәкәттәренең тәртибе элеккесә ҡала.*

*Әгәр яҙғыһын беренсе айҙа һәм көҙгөһөн туғыҙынсы айҙа баш сәрдар тәғәйенләнмәһә, алтмыш мең генә һыбайлы юлландырыла. Ҡытайҙар еренә тәрән үтеп керергә рөхсәт ителмәй уларға, диуарҙар һәм урҙар менән уратылған ҡалаларға ябырылмай, ағастарҙы ҡырҡмай улар. Фәҡәт ил сигенән өс йөҙ ли арауыҡтағы ерҙәрҙе бөлдөрәләр һәм, ер эштәрен, малсылыҡты емертеү өсөн, ундағы халыҡты ҡыралар.*

*Ғәскәрҙәр көньяҡҡа ҡытайҙар еренә баҫып кергәнендә йәйәүлеләр, һыбайлылар һәм тирмәле арбалар ҡыр юлдарынан бармайҙар[11]. Өс йүнәлештә юлландырылған, һәр береһе унар мең һыбайлынан торған темеҫкен отрядтарҙың хәрби башлыҡтары яугирҙәрен ундан алып йөҙ лигәсә арауыҡҡа һибелдертә, улар унда сиратлашып үтәй темеҫкенеү хеҙмәтен. Ҡараңғы төшөү менән борғоларҙан сигнал бирелә һәм шунда уҡ бөтәһе лә*

[11] Дошман яҡтың иген баҫыуҙарын тапатыр өсөн.

*император тирмәһе әйләнәһенә эркелеп ялға туҡтай. Яҡын һәм алыҫ тирәләрҙәге ағастарҙы һындырып, аҙыраҡ бөгә биреп, көмбәҙле ҡарауыл өшәләктәре яһайҙар, әммә һөңгөләр менән ураттмалы лағырҙар төҙөмәйҙәр, ур һәм ҡоймалар ҡормайҙар. Өс тапҡыр барабан ҡағыу менән үк дәррәү сәфәр сығалар, көн тимәй, төн тимәй, һәммәһе хәрәкәткә килә.*

*Дошмандың эре көстәре менән осрашҡанға тиклем һуғыш аттарын буш ҡалдыралар, шуға күрә эйәрләп менгән саҡта улар арымаған, көр була.*

*Әгәр дошман бәрелеш өсөн теҙелһә, уға һуғыш башламайҙар, ә ҡапыл ябырылыу өсөн уның сигенеүен көтәләр. Йыш засада ойошторалар, аҙыҡ ташыу юлдарын өҙәләр, төндәрен дошманды ыҫларға ел үрендә тороп ут яғалар. Яугирҙәре аҙыҡты үҙҙәре таба. Туҙҙырылған ғәскәр яугирҙәре тиҙ үк яңынан уҡмаша. Улар һуғышырға оҫта, һыуыҡҡа түҙемлеләр. Ана шунда ла инде уларҙың ғәскәрҙәренең көс-ҡеүәте»...*

## *9*

Әммә ниндәй генә ҡөҙрәтле, көс-ҡеүәтле булһа ла, Дәү Олояу дәүләтенең дә көнө бөтә — бер яҡтан ҡытайҙар ҡыҫымы, икенсе яҡтан баш күтәргән тунгус-журжундар һөжүме 1125 йылда бөйөк цивилизацияның көлөн күккә осора. Ҡатай-көҙән яҙыуҙарын һәм тарихын тикшереүсе ғалим В.С. Стариковтың һүҙҙәре менән әйткәндә, «11-енсе быуат аҙағында көҙән империяһының бөлөүе башлана. Төрлө халайыҡ һәм ҡәбиләләрҙең баш күтәреүе, император Яньнинға ҡаршы эре феодалдарҙың һәм туғандарының ҡораллы ҡуҙғалыштары, 1110 һәм 1118 йылдарҙағы ҡот осҡос һәләкәтле аслыҡтар (халыҡ ағас ҡайырыһы менән туҡлана һәм ваҡыты менән кеше ашауғаса барып етә) синфи ҡаршылыҡтарҙы һуңғы сиккәсә ҡырҡыулаштыра ла империяның ҡеүәтен ҡаҡшата Көсәйеп алған көньяҡ тунгус ҡәбиләләре журжундар (манжурҙарҙың бабалары) 1115 йылда көҙәндәрҙе ныҡ ҡыйратып, бойондороҡһоҙлоҡ яулай. 1120 йылда улар көҙәндәргә ҡаршы һуғыш башлап, 1125 йылда уларҙың баш ҡалаларының бишеһен дә ҡулға төшөрә, көҙәндәрҙең һуңғы императорын әсир ала»...

Япон һәм Һары диңгеҙҙәрҙе гиҙгән Ҡатай-көҙән хәрби диңгеҙ флоты үҙенән-үҙе ҡапыл эҙһеҙ юғала — ҡайҙа олаҡҡанлығын да белмәйҙәр. Бәғзеләр уны, Тын океанды уҙып, Америка ҡитғаһында кәкер (якорь) ташлаған тип һанай — Мексиканың көньяҡ-көнсығышындағы боронғо майя пирамидалары таштарында Ҡытай иероглифтарына оҡшаш яҙыуҙарҙың табылыуы («Комсомольская правда» гәзитенең 1985 йылғы 17 февраль һаны) ла шуны ҡеүәтләй, буғай...

Иҫән ҡалған, ләкин бөйөк дәүләттәренән яҙған Ҡатай-көҙәндәр император тоҡомло сәрдар Юлай Даши етәкселегендә көнбайышҡа — үҙҙәренең боронғо башҡорт Тәүтөйәге Уралға ҡарай сигенә. Иртыш йылғаһына еткәс, Ҡатай-көҙән ҡәбиләһенең төп ике ырыуы ике яҡҡа бүленеп, уң ҡанаты — *балаҡатайҙар* (бала йәғни кесе ырыу), Иртышты кисеп сығып, Уралдың көнсығыш һәм көнбайыш итәктәрендә Себер юлында төйәкләнә; һул ҡанаты — *ҡарыҡатайҙар* (ҡары — ҡарт йәғни оло ырыу), Иртыштың яры буйлап көньяҡҡа — Үҫәргәндәрҙең боронғо

ҡышлауҙарына табан ҡайырылып, Урта һәм Үҙәк Азия ерҙәрендә төйәкләнә лә, шундағы бөтә төрки ҡәбиләләрен тигеҙ хоҡуҡи нигеҙҙә берләштереп, ҡарыҡатайҙарҙың тарихтағы атаҡлы Көнбайыш Олояу дәүләтен төҙөй, Юлай Дашиға *һурхан* (ҙур хан — хандарҙың ханы) титулы бирелә. 1141 йылда ул, еңеүле һуғыштарҙан һуң бөтә хакимиәтте үҙ ҡулына бөрөп алып, императорға әйләнә. 1213 йылғаса дауам иткән был Ҡарыҡатай дәүләте үҙенең тәңкәләрен һуға (элекке Ҡатай-көҙән аҡсаһы нигеҙендә). Башҡорт халҡының борондан килгән йолаһына, хоҡуҡи ҡанундарына ярашлы, был дәүләттә ҡатын-ҡыҙҙарға ҙур иркенлектәр бирелә (мәҫәлән, ике тапҡыр унда император тәхетендә ҡатын-ҡыҙ ултыра)... Сыңғыҙ-хан яулап алғандан һәм үҙ мөстәҡил дәүләтселеген юғалтҡандан һуң, ҡарыҡатайҙар хәҙерге ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ, ҡараҡалпаҡ халыҡтарының бабалары рәүешендә ireп юғала, дөрөҫөрәге, шул халыҡтарҙың ырыу-араларына әүерелә. Ә Уралдағы балаҡатайҙар, ундағы башҡорт мөхитенә ылығып, үҙҙәренең башҡорт асылын юғалтмай һаҡлап ҡала...

Әммә боронғо Ҡатай-көҙән башҡорттарының бөйөк дәүләтселек традициялары юҡҡа сыҡманы — Дәү Олояуҙың мәшһүр дәүләт эшмәкәре Юлай Сос Уй, еӊ һыҙғанып, шанлы бабабыҙ Сыңғыҙ-ханға бөйөк империяһын төҙөштө һәм был күп милләтлелек нигеҙендәге империясылыҡ традициялары артабан бөйөк Алтын Урҙа, Рәсәй, СССР империялары рәүешендә Ер шарының алтынан бер өлөшөндә ҡөҙрәтле кәүҙәләнде, ә аҫыл бабаларыбыҙ рухы, һүрелмәйенсә, быуындан-быуынға йәнебеҙҙе айбарланы, айбарлай. Боронғо Дәү Олояу дәүләте Ҡатай-көҙәндәренең бөйөк эпосы «Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу»ҙың ошо көндәргәсә бер юлы башҡорт һәм ҡаҙаҡ халыҡтарының ижады булып йөрөүенең сере тап ошо тарихи сәбәптәр менән аңлатыла.

Дәү Олояу дәүләтен тар-мар ҡылған тунгус-журжундар Ҡатай-көҙәндәрҙең бөйөк мәҙәниәтен дә ҡырсып юҡ итә — фәндәр академияһы, юғары уҡыу йорттары, мәктәптәр, китапханалар, картина галереялары һәм ғөмүмән ҡалалары көл-саңға әйләндерелә, Ҡатай-көҙән яҙмаһының таҡтаташҡа ырылған бер килке өлгөләре генә осраҡлы рәүештә ер аҫтында — император кәшәнәһендә һаҡланып ҡала, ләкин уларҙы уҡый һәм яҙа белгән кешеләр дошман ҡулынан ҡырылып бөткән була. Үткән быуатта төрлө илдәрҙең ғалимдары шул Ҡатай-көҙән яҙма ҡомартҡыларын уҡырға тырышып ҡаранылар, ләкин изге ниәттәре тар ҡыҫалар эсендә — монгол, тунгус һәм тағы теләһә ниндәй телдәргә нигеҙләнгәнлектән, йүнле бер нимә лә барып сыҡманы. Теләһәләр ҙә, теләмәһәләр ҙә, серле «Сим-Сим ҡапҡаһы»ның асҡысы башҡорт телендә икәнлеген танырға ваҡыт, буғай...

Ҡатай-көҙән башҡорттары иероглифтарын башҡортса уҡыу нигеҙҙә ундағы һандарҙың (быныһын ғалимдар асыҡлаған), хәҙергесә берәгәй билдәләр менән түгел, ә һүҙҙәр менән (мәҫәлән: бер, ике, өс...) яҙылышына таяна. Ҡытайҙарҙың тәүәрихтәрендә Ҡатай-көҙән теленең ҡытай транскрипцияһында һаҡланып ҡалған бик аҙ ғына һүҙҙәре буйынса, ғалимдар был телде хаҡлы рәүештә беҙҙең Алтай төркөмөнә ҡарата. Быныһы дөрөҫ, әммә Ҡатай-көҙән һүҙҙәре ҡытайҙар транскрипцияһында шаҡтай боҙолоп, ярым-йорто (сонтор) хәлендә бирелгәнлектән, уларҙы, башҡорт теленә таянып, тергеҙелгән тулы булмыштарында алабыҙ:

*Тау* (монголса табун, дагурса тау) «биш».

Башҡортсаһы: таубан/түбән — табан (биш бармаҡлы аяҡ табаны) һәм таубаш (аяҡ табанының башы — биш бармаҡ) — тау-баш — бәш/биш (биш һаны);

*Йау* (монголса жағун, дагурса жау) «йөҙ».

Башҡортсаһы: йау күстә (яу күсе йәғни йөҙ кешенән торған ғәскәр берәмеге) — йау йөстә — йөстә — сто (урыҫса «йөҙ») һәм йөҙ-тә — йөҙ;

*Таули* (монголса таулай, дагурса таул) «ҡуян».

Башҡортсаһы: төләй — төләкәй — төләке — төлкө;

*Наир* (монголса Наран, дагурса Нар) «ҡояш».

Башҡортсаһы: ана-ҡар-аба (инә-корова — һыйыр) — анағар-апа (нагар-апа — ҡыҙыу апа) — анайар-апа (ҡояш-апай) — найар/наир;

*Саир* (монголса саран, дагурса сарөл) «Ай».

Башҡортсаһы: сайыр — һыйыр;

*Шаве* (монголса сибағун, дагурса шобө) «йыртҡыс ҡош».

Башҡортсаһы: шәб-осан (шәп осоусы — бөркөт) — сапсан;

*Ҡашу* (дагурса хасө) «тимер».

Башҡортсаһы: ҡати-бур (ҡаты таш) — ҡа-тибур — тимур — тимер;

*По* (урта монголса һон «йыл», журжунса фон «ваҡыт») «яҙ миҙгеле».

Башҡортсаһы: бор-ал (ал төҫтәге бур — ҡояш тирәләй ер-бурҙың боролоп-әйләнеп йөрөүе) — бойал — бу йул — быйыл (йыл башы — яҙ башы).

Ҡытайсалатып боҙолоп-йәнселгән һәм сонторланған һүҙ киҫәктәренрән барыбер ҙә башҡортса мәғәнәләр “аңҡый”.

Инде килеп донъя ғалимдары мәғәнәләрен (улар урыҫса бирелә) аса алған ун һигеҙ Ҡатай-көҙән иероглифының башҡорт теле аша уҡылыштарын барлайыҡ. Өҫтән аҫҡа һәм һулдан уңға йүнәлештә уҡыла; һәр элемент тапҡырына уның башҡортса аталышын ҡуйып, аҙаҡ бөтәһен бергә ҡушып уҡыйбыҙ (һүрәттәрҙе ҡарағыҙ).

# Катай=көзэн язуы




Великий

Яу турэ — Яу турэне.



Золото

Солотан — олотан — алтын.
Солота(н) — золото.



Государь

Илешмэн — ил=эш=йэн
(ил эше менэн шөгөлләнеүсе йэн,




Дракон

Язакан дөрэ — яҫаған турэ
(күктэн төшкэн император
нэзеле түгел, э ябайзарзан
тэгънеленгэн турэ).




Небо

Канэсэнкер — кан=зэңгэр.

канзэңгэр



күҗдэн

Кан=зэңгэр күктэн.

Неба (род. падеж)



Абызый.

Император

Яб (яп, яу)



ут (ат)

Яу ат (яу аты).

Конь

дэң



эсэнкер

Дэң эсэнкер – дэң зэңгэр.

День

бер



Ай (бучкэргэн Ай)

Ай=бер (айбар – айзын бер
Эйбер.

Абызый



дан

Абызыйдан – Абызыйдан

Императора (род. падеж)




Язакан — язъан.
Язакан — яҫаъан.

Написанное
Образованный




Әсәнтора — сантора (һан тора) — сантор — сонтор (букәреуее Ай).

Месяц




Әсән алата — сан алты — һан алты — алты.

Шесть




Түрә=хан Куктән
(Куктән төшкән түрә=хан, йәғни император нәҫеләнән).

Большой




Ҡатай-көҙәндәрҙең бөйөк дәүләтен емергән ярымҡырағай дошмандар уларҙың мәҙәниәт ҡаҙаныштарын, шул иҫәптән китаптарын, архивтарын, һынлы һәм моңло сәнғәт әҫәрҙәрен тулыһынса юҡ иткән. Яҙмаларының бер өлөшө фәҡәт ҡара ер аҫтында – император ҡорғандарының ядкәрташтарында һаҡланып ҡалған, шуларҙан 755 дана иероглифтың күсермәһе менән танышырға мөмкин (Забытые системы письма. М., 1982; 191 – 210-сы биттәр). Минең башҡорт телендә уҡып ҡарау өлгөм – был бик мөһим эштең башланышы ғына.

Ҡатай-көҙән башҡорттарының бөйөк тарихын һәм уларҙың яҙма ҡомартҡыларын артабан төбөнәсә төпсөнөүҙе киләсәк аҡыл эйәләренә ҡалдырам.

22.11.2003. Өфө.